**Аңлатма яҙыу.**

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә 6-сы класс өсөн башҡорт теленән эш программаһы.

Эш программаһы 70 сәғәткә бүленгән (аҙнаға 2 сәғәт) .

**Төҙөүсе:**

**Дәреслек:** М.Ғ.Усманова, З.М.Ғәбитова, Г.Н.Абдулхаева Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 6-сы класс уҡыусылары өсөн дәреслек. – Өфө : Китап, 2010.

**Программа кимәле :** базислы

**Уҡытыусының тел буйыса уҡыу- уҡытыу методик комплекты (комплексы):** Ғәбитова З. М., Усманова М. Ғ.- Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 6 синыфы өсөн «Башҡорт теле» дәреслегенә методик күрһәтмәләр.-Өфө: Китап, 2003., М.И. Баһауетдинова, Г.Н. Йәғәфәрова- Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен заманса уҡытыу.-Өфө: Китап, 2009.

**Уҡыусылар өсөн тел буйынса уҡыу- уҡытыу методик комплекты (комплексы) :** М.Ғ.Усманова, З.М.Ғәбитова, Г.Н.Абдулхаева Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 6-сы класс уҡыусылары өсөн дәреслек.– Өфө : Китап, 2010; Әхтәмов М.Х.- Омонимдар һүҙлеге.-Өфө: Китап, 2006., Әхтәмов М.Х.- Башҡорт теленең антонимдар һүҙлеге.- Өфө: Китап, 1987.

**Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы:** Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған «Башҡорт теленән программа» (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-IX кластары өсөн) нигеҙендә төҙөлдө. Төҙөүселәре Толомбаев Х. А., Дәүләтшина М.С., Ғәбитова З. М., Усманова М. Ғ.- Ижевск: «Книгоград», 2008.

Башҡортостан Мәғариф Министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа «15-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе» муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһының « Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.

**Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла:**

«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы;

Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы;

«Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» законы;

Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы;

15-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһының «Уҡыу планы»;

15-се урта дөйөм белем биреү мәктәбенең эш программаларының төҙөлөшөн һәм уға талаптарҙы билдәләүсе локаль акты.

**Программа йөкмәткеһе 3 йүнәлештән тора:** телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу; телдең системаһын ( фонетика, орфография, орфоэпия, грамматика, пунктуация) өйрәнеү; бәйләнешле текст менән эшләргә өйрәтеүҙе күҙ уңында тота. Шулай уҡ унда милли тәрбиә тураһында ла мәсьәлә күтәрелә.

**Программаның йөкмәткеһе һәм төҙөлөшө.**

Рус һәм башҡа мәктәптәрҙә телде белмәгән балаларға башҡорт телен өйрәтеүҙең байтаҡ үҙенсәлектәре бар. Уларҙың иң мөһимдәрен һанап китәбеҙ:

1. Балаларҙы һөйләшергә өйрәтеү үҙәк бурыс.
2. 2-4-се кластарҙа башҡорт телен өйрәнеү өсөн уҡытыу планында аҙнаға 1-шәр сәғәт, 6-9-сы кластарҙа аҙнаға 2-шәр сәғәт ваҡыт бирелә. Был дәрестәрҙә балаларҙы башҡортса һөйләшергә, уҡырға, элементар яҙырға өйрәтеү бергә алып барыла. Тел менән әҙәби материалдары бергә кушып өйрәнелә (интеграция).
3. Башҡорт теле мотлаҡ практик рәүештә өйрәнелә. Лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә (коммуникатив йүнәлеш).

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**

**Беҙҙе мәктәп ҡаршылай – 8 сәғәт**

1 сентябрь- Белем көнө. Уҡыусыларҙың хеҙмәт көндәре башланыуы. Белем, тел тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү. Грамматика буйынса 1-5-се кластарҙа үткәндәрҙе ҡабатлау.

**Башҡортостан ере буйлап- 8 сәғәт**

Башҡортостан Республикаһы, уның тарихы, күренекле шәхестәре, байлыҡтары менән танышыу. Тема буйынса һөйләү телмәрен үҫтереү, ижади эштәр башҡарыу. Башҡорт телендә эйәлек төшөнсәһе. Сифат. Сифат дәрәжәләре. Синоним. Антоним. Омоним.

**Юл йөрөү ҡағиҙәләре һәм билдәләре- 5 сәғәт**

Хәүефһеҙлек, юл йөрөү ҡағиҙәләре,транспорт төрҙәре тураһында һөйләргә,өйрәтеү,уҡыу материалын тасуири,аңлы уҡыу. Рәүеш. Рәүеш дәрәжәләре.

**Почта.Телефон.Телеграф -4 сәғәт**

Почтала үҙеңде тота,телефондан дөрөҫ һөйләшә белеү,хат яҙыу ҡағиҙәләренә өйрәтеү.Ҡылым.Ҡылым һөйкәлештәре.Хәбәр һөй-кәлеше.Хәҙерге заман.

**Ҡыш дауам итә– 9 сәғәт**

Ҡыш миҙгеленең үҙенсәлектәре. Текстар уҡыу, шиғырҙар,һынамыштар ятлау, һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү, һүҙ байлығын арттырыу.Ҡылымдың хәбәр һөйкәлеше.Үткән заман. Киләсәк заман.

**Дуҫ ҡәҙерен бел– 7 сәғәт**

Ысын дуҫлыҡтың ҙур мәғәнәгә эйә булыуы,уны һаҡлай белеү. Дуҫлыҡ хаҡында әҫәрҙәр уҡыу, мәҡәлдәр табыу. Ҡылымдың шарт һөйкәлеше.

**Башҡортостан йылғалары,күлдәре. Экология мәсьәләһе- 4 сәғәт.**

Башҡортостандың тәбиғәте,уның байлыҡтары тураһындағы мәғлүмәт менән таныштырыу. Республикалағы йылға, күлдәр тураһында текстар уҡыу.Уларҙың атамаларының мәғәнәһе,килеп сығышы тураһында һөйләшеү. Экология мәсьәләһе.Ҡылымдың теләк һөйкәлеше.

**Һанарға өйрән – 10 сәғәт**

Көн режимы. Аҙыҡ-түлек магазины.Телмәрҙә һандарҙы практик ҡулланыу. Һан. Һан төркөмсәләре. Ябай һәм ҡушма һандар.

**Бына тағы яҙ килде-6 сәғәт**

Яҙ миҙгеленең үҙенсәлектәре. Яҙғы тәбиғәтте күҙәтеү. Осоп килеүсе ҡоштар тураһында һөйләшеү. 1 май,9май байрамдары. Грамматика буйынса 6-сы класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**Тиҙҙән йәй етә-5 сәғәт**

Йәйге тәбиғәт, уҡыусыларҙың йәйге ялы тураһында әңгәмә. Тема буйынса текстар уҡыу,шиғырҙар ятлау. Тәбиғәткә экскурсия ойоштороу. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау, нығытыу.

**Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар**

1. Һүрәтләү, хикәйәләү тибындағы текстарҙы тыңлау һәм аңлап ҡабул итеү;
2. Бирелгән тема буйынса диалог төҙөү, диалогты дауам итеү;
3. Ишеткәнде, күргәнде 4-6 һөйләм менән бәйләнешле итеп һөйләү.
4. Ҡысҡырып шыма һәм тасури уҡыу.
5. Һүҙлек һүҙҙәрен белеү һәм уларҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу.
6. Дәрестә өйрәнелгән грамматик материалды практик ҡуллана белеү.
7. Ижади диктанттар, өйрәтеү изложениелары һәм иншалары яҙыу
8. Программала күрһәтелгән шиғырҙарҙы яттан белеү; 3-4 башҡорт йырын башҡара белеү, мәктәптең үҙешмәкәр сараларында ҡатнашыу, сәхнәлә сығыш яһау. Бөтә был эштәр тураһында бәйләнешле һөйләй белеү.

**V. Уҡыу-уҡытыу программаһында планлаштарылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштерелеүен баһалау**

1. Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була.

   Уларға түбәндәгеләр инә:

– башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
– тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
– дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
– һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;
– тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар һ.б. төҙөү.

2. Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.
3. Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән һәр класта түбәндәге күләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала:

| | | |
|---|---|---|
| 1 | Күсереп яҙыу | 1 |
| 2 | Һорауҙарға яуап | 1 |
| 3 | Диктант | 4 |
| 4 | Изложение | 2 |
| 5 | Инша | 2 |

Яҙма эш төрҙәре (изложение,инша) яҙыу уҡыусыларҙың уҡыу кимәленә, белеменә, мөмкинселегенә ҡарап уҡытыусы ҡарамағына ҡалдырыла һәм улар урынына шул уҡ күләмдә түбәндәге яҙма эштәр үткәрергә мөмкин:

- карточкалар менән эш;
-тест;
-һүрәт буйынса һөйләмдәр төҙөү;
-текста һөйләмдәрҙә һүҙҙәр тәртибе;
-терәк текстар менән инша яҙырға өйрәнеү:
-һүҙлек диктанты;
-һөйләмдәр төҙөү;
-һүҙлек менән эш;
-һүрәтләү иншаһы;
-синквейн төҙөү (слайд төҙөү: шәжәрәләр, минең ғаиләмде…)

## **Календарь-тематик план**

VI класс, йылына 70 сәғәт.

*Аҙнаға 2 сәғәт иҫәбенән.*

| № | Тема | сәғәт һаны | биттәр | VI | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | план | үткәр |
| *1 сирек – 16 сәғәт.* | | | | | |
| *Беҙҙе мәктәп ҡаршылай. 8 сәғәт.* | | | | | |
| 1 | Белем байрамы. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре. | 1 | 4-5 | | |
| 2 | Республика көнө. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. | 1 | 6 | | |
| 3 | Тыныслыҡ. | 1 | 7-8 | | |
| 4 | Һүҙ- тел күрке. | 1 | 10-11 | | |
| 5 | Р.Ғарипов. Ямғыр яуа. Исемдең килеш менән үҙгәреше. | 1 | 11-12,14 | | |
| 6 | Телмәр үҫтереү | 1 | | | |
| 7 | Хаталар өҫтөндә эш. Беҙ мәктәптә. | 1 | 16-17 | | |
| 8 | Р. Сабитов. Белем иле. Һөйләм төрҙәре. | 1 | 18-19 | | |
| *Башҡортостан ере буйлап. 8 сәғәт* | | | | | |
| 9 | Тыуған илем- Башҡортостан. | 1 | 21-23 | | |
| 10 | С.Юлаев. Тыуған илем. Башҡорт телендә эйәлек төшөнсәһе. | 1 | 23-25 | | |
| 11 | Ә.Ихсан. Башҡортостан. Эйәлек зат ялғаулы исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше | 1 | 25-28 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 12 | С.Бәҙретдинов. Файҙалы ҡаҙылмалар. Сифат. | 1 | 29 | | |
| 13 | Өфө- Башҡортостандың баш ҡалаһы. Сифаттарҙың яһалышы. | 1 | 30 | | |
| 14 | Башҡортостандың тәбиғәте. Сифат дәрәжәләре. | 1 | 32-35 | | |
| 15 | Башҡортостан флагы. Синонимдар. | 1 | 35-39 | | |
| 16 | **Телмәр үҫтереү** | 1 | | | |
| 17 | Хаталар өҫтөндә эш. Һөйләй тарих биттәре. | 1 | 41-42 | | |
| 18 | Бына ниндәй егеттәр бар! Антонимдар. Омонимдар. | 1 | 42-46 | | |
| | *2 сирек – 16 сәғәт.* | | | | |
| | *Юл йөрөү ҡағиҙәләре һәм билдәләре. 6 сәғәт.* | | | | |
| 19 | Б.Байым. Светофор. Фразеологизмдар. | 1 | 46-48 | | |
| 20 | Хәйерле юл. Рәүеш тураһында төшөнсә. | 1 | 48-50 | | |
| 21 | Троллейбуста. Рәүеш дәрәжәләре. | 1 | 51-52 | | |
| 22 | Телмәр үҫтереү | 1 | | | |
| 23 | Хаталар өҫтөндә эш. А.Игебаев. Самолетта остом. | 1 | 53 | | |
| | *Почта. Телеграф. Телефон. 4 сәғәт.* | | | | |
| 24 | Телефондан нисек һөйләшергә?. Ҡылым. | 1 | 54-55 | | |
| 25 | “Ишәк, эт, бесәй, әтәс” әкиәте.Ҡылымдың хәбәр һөйкәлеше. | 1 | 56-57 | | |
| 26 | Хат яҙыу. Хәбәр һөйкәлешенең хәҙерге заманы. | 1 | 65 | | |
| 27 | Газета- журналға языҙыу. Хәбәр һөйкәлешенең хәҙерге заман юҡлыҡ формаһы. | 1 | 66-67 | | |
| | *Ҡыш дауам итә. 9 сәғәт.* | | | | |
| 28 | Башҡортостанда ҡыш. Хәбәр һөйкәлеше. | 1 | 68-70 | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | Үткән заман. | | | | | |
| 29 | Экскурсия .Ҡыш- матур миҙгел! | 1 | | | | |
| 30 | Ҡышлаусы ҡоштар. Үткән замандың юҡлыҡ формаһы. | 1 | 70-72 | | | |
| 31 | Ни өсөн шыршыны биҙәйҙәр? | 1 | 72 | | | |
| 32 | Контроль диктант. | 1 | | | | |
| 33 | Хаталар өҫтөндә эш. Хәбәр һөйкәлеше. Киләсәк заман. | 1 | 76-77 | | | |
| 34 | Кластан тыш уҡыу. Яңы йыл менән! | 1 | “Акбуҙат” ж. | | | |
| *3 сирек – 20 сәғәт.* | | | | | | |
| 35 | Ж. Кейекбаев. Айыу ниңә ҡышын йоҡлай? | 1 | 80 | | | |
| 36 | Инша. Ҡыш- яратҡан миҙгелем. | 1 | | | | |
| *Дуҫлыҡ ҡәҙерен бел. 7 сәғәт.* | | | | | | |
| 37 | Хаталар өҫтөндә эш. Нимә ул дуҫлыҡ? | 1 | 80-81 | | | |
| 38 | Эт- кешенең тоғро дуҫы. | 1 | 82 | | | |
| 39 | Д.Фәтихова. Кем дуҫ? | 1 | 82-83 | | | |
| 40 | А. Ғабдрахманов. Әсәйемдең тыуған көнө. Ҡылымдың шарт һөйкәлеше. | 1 | 85-86 | | | |
| 41 | Р.Бикбаев. Дуҫлыҡ ауыр саҡта һынала. | 1 | 87-88 | | | |
| 42 | А.Йәғәфәрова. Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар. | 1 | 92 | | | |
| 43 | “Йылан менән балыҡ” әкиәте. | 1 | 126-127 | | | |
| *Башҡортостан йылғалары, күлдәре. Экология мәсьәләһе. 4 сәғәт.* | | | | | | |
| 44 | Башҡортостан- икенсе Швейцария. | 1 | 93-94 | | | |
| 45 | Ағиҙел буйында. | 1 | 95 | | | |
| 46 | Тәбиғәтте нисек яратырға? Ҡылымдың теләк һөйкәлеше. | 1 | 96-99 | | | |
| 47 | Б.Мәһәҙиев. Башҡортостан-матур таштар иле. | 1 | 100 | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | *Һанарға өйрән. 10 сәғәт.* | | | | |
| 48 | Һанай беләһеңме? Һан тураһында төшөнсә | 1 | 101-102 | | |
| 49 | Көн режимы. Ябай һәм ҡушма һандар. | 1 | 103-104 | | |
| 50 | Аҙык-түлек магазинында. Һан төркөмсәләре. Төп һандар. | 1 | 105-107 | | |
| 51 | Өфө урамдарында. Рәт һандары. | 1 | 108-109 | | |
| 52 | Контроль диктант. Һандар. | 1 | | | |
| 53 | Хаталар өҫтөндә эш. Йыйыу һандары. | 1 | 110 | | |
| 54 | Сама һәм кәсер һандары. | 1 | 111-112 | | |
| | *4 сирек -14 сәғәт.* | | | | |
| 55 | "Аҡбуҙат" ипподромы. «Һан» темаһын ҡабатлау. | 1 | 113-114 | | |
| 56 | Борсоулы мәғлүмәттәр. | 1 | 115 | | |
| 57 | Һорауҙарға яуаптар. | 1 | 11 | | |
| | *Бына тағы яҙ килде. 6 сәғәт.* | | | | |
| 58 | Яҙ килде. | 1 | 117 | | |
| 59 | Кеше һәм үҫемлектәр. | 1 | 121-123 | | |
| 60 | Ҡоштарҙы ҡаршылайбыҙ. | 1 | 124 | | |
| 61 | Картина буйынса инша. Тәбиғәт уяна. | 1 | | | |
| 62 | Хаталар өҫтөндә эш. Уҡыу техникаһын тикшереү. | 1 | | | |
| 63 | «Алтын тамсы» әкиәте. | 1 | 126 | | |
| | *Тиҙҙән йәй етә. 5 сәғәт.* | | | | |
| 64 | М.Сиражи. Йәй. | 1 | 125 | | |
| 65 | Экскурсия. Йәйге тәбиғәтте күҙәтәбеҙ. | 1 | | | |
| 66 | Контроль диктант. Һандар. | 1 | | | |
| 67 | Хаталар өҫтөндә эш. | 1 | | | |
| 68 | 6-сы класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 69 | Кластан тыш уҡыу.һаумы йәй. | 1 | | | |
| 70 | Йомғаҡлау дәресе.<br>Үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 1 | | | |

**Уҡыу - уҡытыу методик ҡулланмалар исемлеге**

1. Усманова М. Ғ. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа һәм схемаларҙа.
2. Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М. С., Сиразетдинов З. Ә. Башҡротса өйрәнәйек. Урыҫ мәктәптәренең 1-4 – се синыфтары өсөн башҡорт теленән электрон дәреслек. – Өфө: Мәғариф министрлығы, 2003.
3. Аслаев Т. Х., Атнағолова С.В. Телмәр үҫтереү буйынса сюжетлы картиналар.- Өфө: Китап, 1996.
4. табл
5. Башҡорт әҙәбиәте буйынса аудио-видеоәсбап.- Өфө: Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы. 2005.
6. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа. Фонетика. Морфология. - Башҡортостандың бәләкәй даһийы. Өфө : «Эдвис» уҡытыу – методика үҙәге, 2008.
7. Әхтәмов М.Х.- Омонимдар һүҙлеге.-Өфө: Китап, 2006.
8. Әхтәмов М.Х.- Башҡорт теленең антонимдар һүҙлеге.-Өфө: Китап,1987.
9. Ғәбитова З. М., Усманова М. Ғ.- Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 6 синыфы өсөн «Башҡорт теле» дәреслегенә методик күрһәтмәләр.- Өфө: Китап, 2003.
10. М.И. Баһауетдинова, Г.Н. Йәғәфәрова- Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен заманса уҡытыу.- Өфө: Китап, 2009.

**Материал-техник ҡулланмалар**

1. Баҫма пособиялар: таблицалар, портреттар.
2. Ишетеп- күреү (экранно – звуковые) пособиялар: видеофильмдар, аудиояҙмалар.
3. ИКТ: компьютер, телевизор.

**Әҙәбиәт исемлеге**

1. Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М.С. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 6-сы класы уҡыусылары өсөн дәреслек. – Өфө : Китап, 2010.

2. Усманова М. Ғ., Ғәбитова З.М.- Башҡорт теленән диктант һәм изложениелар йыйынтығы: Рус мәктәптәренең 5-11-се клас уҡытыусылары өсөн ҡулланма.- Өфө: Китап, 2009.
3. Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. – Өфө: Китап, 2009.
4. Башҡортса – русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1994.
5. Әүбәкирова З.Ф., Әүбәкирова Х.Е., Дилмөхәмәтов М.И. Мин башҡортса уҡыйым – Өфө: Китап, 2007.
6. Башҡорт теле таблицаларҙа, схемаларҙа һәм ҡағиҙәләрҙә. Әүбәкирова З.Ф.– Өфө, 2006.
7. Тел төҙәткестәр, тиҙәйткестәр, һанамыштар. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.
8. Журналдар: «Башҡортостан уҡытыусыһы», «Аҡбуҙат», «Аманат».
9. Ял минуттары өсөн күнегеүҙәр. Методик ҡулланма. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.
10. Башҡорт теленән изложение текстары йыйынтығы. 1- 4 - се класс уҡытыусылары өсөн ҡулланма– Өфө :
11. М.Ф. Үтәева-Башҡорт теле. Күнегеүҙәр.- Өфө: РФА ӨҒҮ ТТӘИ, 2007.

**Перечень образовательных Интернет- ресурсов**

2. Сайт, посвященный изучению башкирского языка - **http://tel.bashqort.com/home**
3. Электронный журнал учителей башкирского языка и литературы - **http://ostaz.ru/**
4. Башкирский языковой портал - **http://bashkort-tele.narod.ru/**
5. Башкирский форум - **http://www.bashforum.net/** **http://bashkort-tele.livejournal.com/**
6. **www.morb.ru** Официальный сайт Министерства образования Республики Башкортостан
7. **www.edu.ru** Федеральный портал "Российское образование"
8. **www.минобрнауки.рф**.минобрнауки.рф Министерство образования и науки РФ
   **http://www.pravitelstvorb.ru/** Официальный сайт Правительства Республики Башкортостан
9. **www.apkpro.ru** Академия повышения квалификации и профессиональной переподготовки работников образования
10. **www.ege.edu.ru** официальный информационный портал ЕГЭ
11. **www.zankov.ru** Образовательная система Л.В.Занкова
12. **kpolyakov.narod.ru** Методические материалы и программное обеспечениедля школьников и учителей
13. **window.edu.ru** информационная система "Единое окно доступа к образовательным ресурсам"
14. **school-collection.edu.ru** единая коллекция цифровых образовательных ресурсов
15. **fcior.edu.ru** федеральный центр информационно-образовательных ресурсов